# Семинар практикум

## "Кесе йәштәге балаларҙың
## өн әйтелеше боҙолоуын профилактикалау"

Баланың телмәрен үҫтереүҙә кесе йәштән үк өндәр мәҙəниәте тәрбиәләү иң мөһим урынды алып тора. Нимә ул өндәр мәҙəниәте тәрбиәләү? Кескәй балала тәүҙә өндәрҙе ишетеү һәм айырыу һәләте формалаша, аҙаҡ инде ул уларҙың дөрөҫ әйтелешен үҙләштерә. Ә өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү- телмәр аппаратын нығытыуға, унын һығылмалылығын үҫтереүгә йүнәлтелгән артикуляция күнекмәләрен аңлы һәм үҙаллы эш итә белеүҙән башлана. Бала был күнекмәләрҙе өлкәндәр күрһәтеүенсә ҡарап, уға оҡшатып уйын аша башҡара.

Кесе йәштән үк, өндәрҙе дөрөҫ әйтеү эшенә ныҡлы иғтибар бүленергә тейеш. Йыл буйына бөтә өндәрҙе лә яҡшы итеп әйтергә өйрәтеү эше алып барыла, әммә ләкин күп өндәрҙе бала тейешенсә әйтә алмай. Сөнки уның мускулатураһы, ирендәр хәрәкәте үҫешеп етмәгән. Өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү һуҙынҡы өндәрҙән: а, ә, о, ө, ү, у, и һәм ябай тартынҡыларҙын: б, п, в, м, ҫ, ҙ башлана. Ул бер нисә этаптан тора.

- Иң тәүҙә баланы өндө айырым әйтергә күнектерәләр. Өноҡшаш уйындар уйнатыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Мәҫәлән, *ә-ә-ә* – бала илай, йырлай. *О-о-о* – айыу олой. *Ө-ө-ө* – айыу балаһы олой. У-у-у – паровоз ҡысҡыра. Ҙ-ҙ-ҙ – бал ҡорто бал йыя. Ҫ-ҫ-ҫ – ата ҡаҙ, йылан ыҫылдай. Һуңынан иһә ижек юлдарын өйрәнәбеҙ. Мә-мә-мә – кәзә баҡыра. Муу-муу- һыйыр мөңрәй. Мө-мө-мө – быҙау мөңрәй һ.б.
- Киләһе этапта өндөң дөрөҫ әйтелеше һүҙҙәрҙә нығытыла. Тәрбиәсе өндөң генә дөрөҫ әйтелешен түгел, ә бөтөн һүҙҙең асыҡ, аныҡ, дөрөҫ әйтелешен дә талап итергә тейеш. Мәҫәлән, мә-мә-мәк, кәмә. Ө-ө-ө – өй, көн, төн.

  Ҙ-ҙ-ҙ – ҡаҙ, ҡыҙ һ.б.
- Һуңынан өндәрҙе фразаларҙа нығытыу эше алып барыла. Һүҙҙәр менән ябай ғына һөйләмдәр төҙөп, өндө нығытыу кәрәк. Яҙ килде. Тамсы тама тып-тып-тып. Һыйыр һөт бирә. Һөт тәмле. Тәрбиәселәргә балаларҙың телмәрендә килеп сыҡҡан хаталарҙы төҙәтеп тороу кәрәк. Ошо осорҙа балалар һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартып әйтәләр: кәфит – кәнфит, каф – шкаф, кипат – китап. Йәки өҫтәлмә өндәр индерәләр: эсәмәйем –

эсмәйем, кейәмәйем – коймәйем. Тәрбиәселәргә был үҙенсәлектәрҙе белеү бала телмәрендәге кәмселектәрҙе тиҙ арала төҙәтергә ярҙам итәсәк. Ошо осорҙа бәләкәй балалар шыбырлашып һөйләшә белмәйҙәр. Өндәрҙе төрлө тауыштар менән әйтелгән күнегеүҙәр тауыш аппаратының үҫешенә булышлыҡ итә һәм баланың тасуири һөйләү сараларын дөрөҫ ҡулланыуға әҙерләй.

***Икенсе кескәйҙәр төркөмөндә*** өндәрҙе ишетеп ҡабул итеү һәләтен үҫтереүҙе дауам итәбеҙ. Өндәрҙе дөрөҫ әйттереү эше дауам ителә. Бының өсөн тел, ирен мускулдарын ныҒытыу уларҙың хәрәкәтсәнлеген үҫтереү өсөн күнегеүҙәрҙе уйын формаһында үткәреү файҙалы: тел менән ирендәрҙе ялау
(тәмле варенье), тел шартлатыу (атта сабып киттек), ирендәрҙе ослайтыу (филдең томшоҒо), яңаҡтарҙы ҡабартыу ( һимеҙ шалҡан, алма), эскә тартыу
(ябыҡ йәшелсәләр), кемдең тубы ҙур (тел менән сикәләргә төртөү) һ.б. Ошондай күнегеүҙәр артикуляцион аппаратты, өндәр әйтелешен яҡшырта. Был йәштә өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү генә түгел, ә өндәрҙе ишетеп айыра, дөрөҫ тын алырға, телмәр темпын, тауыш көсөн дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәтеү мөһим тәү шарттарҙың береһе булып тора. Был осорҙа ла өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү өҫтөндәге эш өс этапта алып барыла.

***Беренсе этап*** – өндәрҙе дөрөҫ әйтергә әҙерләү. Шул уҡ бөтә һуҙынҡыларҙы һуҙыу һәм ҡайһы бер тартынҡыларҙан ( в, ф, п, з, с ), ниндәйҙер конкрет образ менән бәйләргә була: з-з-з – серәкәй безелдәй, ш-ш-ш – урман шаулай, ф-ф-ф – терпе фырылдай, ңә-ңә-ңә – бала илай һ.б. Ошондай уйындар өндәрҙе дөрөҫ әйтеүгә булышлыҡ итә, сөнки балалар уйын аша өндәрҙе теләк менән күп тапҡыр ҡабатлайҙар.

Төрлө алымдар ҡулланыу бик отошло була. Мәҫәлән, “Үҙ йөрөшлө уйынсыҡтар” уйыны. Был уйында балалар атты, тейенде, серәкәйҙе, самолетты һ.б. әйберҙәрҙе һынландырып күрһәтәләр. Тәрбиәсе уларҙы “асҡыс” менән йөрөтөп ебәрә. Мәҫәлән, л-л-л – самолет оса, ҙ-ҙ-ҙ –

һағыҙаҡ оса, и-һо-һо – ат саба һ.б. Әгәр бала өндө ҡабатламаһа, уйынсыҡ боҙолған тип аңлатыу кәрәк. Был уйындар баланың ишетеү һәләтен камиллаштыра, бер юлы үҙ аллы хәрәкәт итеү әүҙемлеге үҫешә, уйынға ҡыҙыҡһыныу уята.

***Икенсе этап*** – өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү. Ошо осорҙа дөрөҫ тын алырға, тасуири һөйләүҙе үҫтереү кәрәк. Һуҙынҡы өндәрҙе төрлө тауышта йырлау – оҙон һулыш сығарыуҙы булдырырға булышлыҡ итә. Өноҡшаш уйындар менән тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен күберәк үҙләштереү кәрәк.

- ✓ Сәп-сәп сәпәкәй. Минең ҡустым бәләкәй.
- ✓ Һоп-һоп атҡайым. Топ-топ-топ тояҡкайым.
- ✓ Тып-тып итеп ямғыр яуа.
- ✓ Дин-дин ҡыңғырау йырлай.

***Өсөнсө этапта*** - өндәрҙе фразаларҙа, телмәрҙә нығытыу. Һүҙҙәрҙең атамаһын дөрөҫ әйттереү, һөйләмдәр төҙөтөү, тел төҙәткестәр ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Әкиәт һөйләгәндә, сәхнәләштергәндә балаларҙы төрлө тауыштар менән һөйләргә өйрәтергә кәрәк. Мәҫәлән йомро икмәктең йырлауын, төлкөнөң йырлағанын, айыуҙың илауын һ.б. Шул уҡ ваҡытта телмәрҙә тасуири һөйләү эше барлыҡка килә.

Бала өндәрҙе дөрөҫ итеп өйрәнгәндән һуң оҡшаш өндәрҙе дөрөҫ итеп әйтепү эше дауам ителә. Был эш бутап әйтелә торған ике өндө лә бала дөрөҫ әйтә башлағас ҡына үткәрелә (ғ-г, ҙ-з, ә-а, у-ү, о-ө һ.б.) Төрлө уйындар уйнатыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Мәҫәлән, серәкәй нисек безелдәй?(з-з-з).

Һағыҙаҡ нисек оса? (ҙ-ҙ-ҙ).

Ҡурсаҡтарға һүрәт бүләк итәйек. **Һ**әҙиәгә – **һ**әйкәл, **һ**уған. **Х**әлилгә – **х**алат, **х**ат һ.б. Бында инде “**һ-х**” өндәрен һүҙҙәрҙә дөрөҫ ҡулланыу, был өндәрҙе ишетә һәм айыра белеү балаға өндөң әйтелешен отоп ҡалырға ярҙам итә. Даими рәүештә телмәр үҫтереү дәрестәрендә планлаштырып алып барылған был эш баланың телмәр үҫешенә ҙур ярҙам булып тора.